**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Администрация муниципального района Благоварский район**

**Республики Башкортостан**

**МОБУ СОШ с.Удрякбаш**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| на заседании педагогического совета | на заседании управляющего совета школы | Директор |
| | | Рахматуллина Ф.Т. |
| протокол №1<br>приказ №90-ОД от «29» августа 2023 г. | протокол №1<br>приказ №90-ОД от «28» августа 2023 г. | приказ №90-ОД от «29» августа 2023 г. |

**Календарно-тематическое планирование**

**учебного предмета «Родной (башкирский) язык и литература»**

для обучающихся 5,7,9 классов

**с.Удрякбаш 2023**

## 1.«Туған тел» һәм "Туған әҙәбиәт" предметын, курсын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

***Планируемые результаты освоения учебного предмета “Родной (башкирский) язык”и " Родная (башкирская) литература"***

### 5 класта шәхсән, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре

Бишенсе класта «Туған тел» предметының **шәхсән һөҙөмтәләре** булып түбәндәгеләр тора:

- тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
- башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;

- аралышыуҙа рус теленән алған башҡорт телендә тәржемә итеп ҡуллана белеү;

- башҡорт теленән алынған белем һәм күнекмәләрҙе мәктәптә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу;
- башҡорт телен башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи байлығын өйрәнеү сараһы булараҡ ҡулланыуҙы аңлау;
- төрлө социаль ситуацияларҙа оло кешеләр һәм үҙ тиңдәштәрең менән хеҙмәттәшлек күнекмәләрен үҫтереү;

- үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлелеге үҫтереү;

- уҡыған әҫәрҙәрҙең геройҙарына, уларҙың ҡылыҡ, эштәренә үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү.

**Метапредмет һөҙөмтәләр булып** универсаль эш төрҙәрен формалаштырыу тора.

*Регулятив УЭТ:*

- уҡытыусы ярҙамында дәрестә эш маҡсатын билдәләү;
- дәрестә эштең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү;
- уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләргә өйрәнеү.

Регулятив УЭТ формалаштырыуҙың сараһы булып дөрөҫ уҡыу формалаштырыу һәм проблемалы диалогик уҡытыу технологиялары тора.

*Танып белеү УЭТ*:

- китап менән эшләй белеү (шартлы тамғаларҙы айырыу);
- текста, һүрәттәрҙә һорауҙарға яуап табыу;
- уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың берҙәм эшенә баһа биреү.

Танып белеү УЭТ сараһы – дәреслек текстары һәм функциональ грамотлылыҡты (мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтеү күнекмәләрен) булдырыусы методик күрһәтмәләр.

*Коммуникатив УЭТ:*

- фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә белдереү (һөйләм һәм бәләкәй текст кимәлендә);
- башҡаларҙың телмәрен тыңлау һәм аңлау;
- тексты тасуири уҡыу һәм һөйләү;
- уҡытыусы менән берлектә класташтар менән үҙеңде нисек тотоу һәм аралашыу ҡағиҙәләре тураһында һөйләшеү һәм уларҙы үтәү;
  - икәүләп, төркөмдә эшләргә өйрәнеү; төрлө ролдәр башҡарыу (лидер, башҡарыусы)
  - яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың һәм тиңдәштәреңдең әйтеүе, балалар тапшырыуҙары, аудиояҙмалар һәм мәғлүмәти технологияның башҡа формаларын) адекват ҡабул итеү;
  - һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе һәм һөйләмде төҙөү, әйтеү буйынса белем һәм күнекмәләр;
  - бирелгән тема буйынса диалог төҙөй белеү; һорауҙарға ҡыҫҡа һәм тулы яуап биреү, диалогты башлай һәм тамамлай белеү;
  - әҙерләнеп һәм әҙерләнмәй етеҙ, аңлап һәм тасуири уҡыу, тексты ҡыҫҡа һәм һайлап һөйләй белеү;

- таныш орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланып, уҡытыусы ярҙамында һәм үҙ аллы өйрәнеүҙә контроль характерҙа яҙма эштәрҙе башҡара белеү;
- үҙ аллы эшен тикшерә һәм башҡорт теленән предмет-ара (башҡа предмет дәрестәрендә) үҙ белемеңде анализлай белеү;
- төп предметтан предмет-ара аңлатмаларҙы үҙләштереү;
- мәктәптә һәм мәктәптән тыш ҡыҙыҡһыныуҙарынан сығып, башҡорт телендә аралышыу.

Коммуникатив УЭТ формалаштырыуҙың сараһы булып продуктив уҡыу һәм парҙар менән һәм бәләкәй төркөмдәрҙә эш ойоштороу тора.
«Туған тел» курсын өйрәнеүҙең **предмет һөҙөмтәләре** булып түбәндәгеләр тора:

- Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
- Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
- Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу; текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
- Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;
- Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу; текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу; бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
- Өйрәтеү характерындағы иншалар яҙыу; яҙғанды элементар формала камиллаштыра алыу.

**5 класс**

*Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.*

*Фонетика һәм орфоэпия.* Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.

*Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.* Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

*Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше.* Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ç, з-ҙ тартынҡыларының дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.

*Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо.* Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү.

*Башҡорт телендә сингармонизм.* Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

*Башҡорт телендә ижектәр.* Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу.

*Башҡорт телендә баҫым, уның үҙенсәлектәре.* Баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баҫымды сағыштырыу.

*Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар* тураһында төшөнсә биреү. Тамырға ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүен күҙәтеү, күнегеүҙәр эшләү.

*Башҡорт һәм рус телендә интонация* һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баҫым, пауза, фраза баҫымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баҫымы.

*Башҡорт һәм рус телдәрендә интонацияның үҙенсәлектәрен асыҡлау*. Башҡорт телендәге ябай һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү күнекмәләре биреү.

*Башҡорт теленең һүҙлек байлығы*, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.

*Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр*, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу күнегеүҙәре. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге ролен билдәләү. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу, тәржемә итеү, улар менән һөйләмдәр төҙөү.

Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Башҡорт теленең агглютинатив тел булыуына күнегеүҙәр. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу.

Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү.

Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы. Практик танышыу.

Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү: тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ.

Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу.

Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр.

Эш ҡағыҙҙары төрҙәренән белешмә биреү. Хат яҙырға өйрәтеү.

## 2. Уҡытыу предметының йөкмәткеһе.
## *Содержание учебного предмета.*

**Көҙ етте.**( 13 сәғәт) С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә. Б.Бикбай.Туған тел. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу. Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетика һәм орфоэпия. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу.
Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.
**Минең ғәзиз Уралкайым** (12 сәғәт) Башҡортостан тауҙары. Тыуған ер ҡобайыры. Уралиә иле. Т.Ғәниева. Синонимдар. Өфө-Башҡортостандың баш ҡалаһы. Мин Башҡортостандан. Башҡорт телендә һуҙынҡы өндәрҙең үҙенсәлектәре. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр. «Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү. Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү. «Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре.
**Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар (9 сәғәт)** А. Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар (әкиәт). Антонимдар. Тыуған көн. Омонимдар. Әңгәмә. Минең дуҫым.

Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әкиәттәрҙең һәм хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү. Башҡорт телендә сингармонизм, омонимдар, антонимдар. Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
**Ҡыш. (22сәғәт)** С.Әлибаев. Ҡыш. Бәйләнешле текс төҙөү. М.Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта. Башҡорт теленен үҙенсәлекле өндәре. Ҡыш башы. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Ижек. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.
**Башҡорт халыҡ ижады. (16 сәғәт)** Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. «Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте, «Ҡамыр батыр» әкиәттәре. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар. Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү. Башҡорт телендә ижектәр. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу. Әҫәрҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау.Төрлө һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр йыйыу, йырҙар тыңлау. Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы.
**Яҙ (18 сәғәт)** Р.Назаров. Яҙ килде. С.Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? Эш ҡағыҙҙары. Хат яҙыу. Нисек телефон аша дөрөҫ һөйләшергә. Баҡсалағы яҙғы эштәр. Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, тәржемә күнекмәләре үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә. Башҡорт теленең һүҙлек байлығы, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы. Эш ҡағыҙҙары төрҙәренән белешмә биреү. Хат яҙырға өйрәтеү.
**Йәй. (12 сәғәт)** Көләмәс турахында төшөнсә. Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Май –Еңеү көнө. Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, тәржемә эштәре башҡарыу. Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү. Шиғырҙа йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы. Үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең тормошон күҙәтеү. Йәй, йәйге каникул, йәйге эштәр тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарға характеристика биреү, яҙма эштәр эшләү. Йәйге тәбиғәткә экскурсия ойоштороу. Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## 3. Календарно-тематическое планирование
## Календарь-тематик план. Туған тел. 5 класс.

| № | Тема | | Үткәрелеү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| | | | План | фактик |
| **Күҙ етте.**( 8 сәғәт) | | | | |
| 1 | С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә. | 2 | 05.09<br>07.09 | |
| 2 | Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. | 2 | 12.09<br>14.09 | |
| 3 | Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел. Фонетика. Орфоэпия. | 2 | 19.09<br>21.09 | |
| 4 | Башҡорт телендә Й хәреф-өнө. Фонетик күнегеүҙәр. | 2 | 26.09<br>28.09 | |
| **Минең ғәзиз Уралкайым.** ( 8 сәғәт) | | | | |
| 5 | Минең ғәзиз Уралҡайым. Тыуған ер ҡобайыры. | 2 | 03.10<br>05.10 | |
| 6 | Синонимдар. | 2 | 10.10<br>12.10 | |
| 7 | Мин Башҡортостандан. | 2 | 17.10<br>19.10 | |
| 8 | Башҡорт телендә һуҙынҡы өндәрҙең үҙенсәлектәре. | 2 | 14.10<br>26.10 | |
| **Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар.** ( 6 сәғәт) | | | | |
| 9 | Антонимдар. | 2 | 07.11<br>09.11 | |
| 10 | Омонимдар. | 2 | 14.11<br>16.11 | |
| 11 | Әңгәмә. Минең дуҫым. | 2 | 21.11<br>23.11 | |
| **Ҡыш.** ( 14 сәғәт) | | | | |
| 12 | Бәйләнешле текс төҙөү. | 2 | 28.11<br>30.11 | |
| 13 | Фонетик күнегеүҙәр. | 2 | 05.12<br>07.12 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 14 | Башҡорт теленен үҙенсәлекле өндәре. Диктантҡа әҙерләнеү. | 2 | 12.12<br>14.12 | |
| 15 | Контроль эш. **Декабрҙә.** | 1 | 19.12 | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. | 2 | 21.12 | |
| 17 | Исем.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 3 | 26.12<br>28.12 | |
| 18 | Ижек. Һуҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. | 2 | 09.01<br>11.01 | |
| **Башҡорт халыҡ ижады.** (10 сәғәт) | | | | |
| 20 | Ҡамыр батыр. Башкорт халык әкиәте. | 2 | 16.01<br>18.01 | |
| 21 | Кәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән. Әкиәт. | 2 | 23.01<br>25.01 | |
| 22 | Мәҡәл тураһында төшөнсә.<br>“Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре” китабы менән эш. | 2 | 30.01<br>01.02 | |
| 23 | Башҡорт телендә баҫым. | 2 | 06.02<br>08.02 | |
| 24 | Башҡорт халыҡ йырҙары. | 2 | 13.02<br>15.02 | |
| **Яҙ.**( 12 сәғәт) | | | | |
| 25 | Р.Назаров. Яҙ килде. | 2 | 20.02<br>22.02 | |
| 26 | Инша. Минең әсәйем. | 2 | 27.02<br>29.02 | |
| 27 | С.Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? | 2 | 05.03<br>07.03 | |
| 28 | Эш ҡағыҙҙары. Хат яҙыу. | 2 | 12.03<br>14.03 | |
| 29 | Нисек телефон аша дөрөҫ һөйләшергә. | 2 | 19.03<br>21.03 | |
| 30 | Баҡсалағы яҙғы эштәр. | 2 | 02.04 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | 04.04 | |
| **Йәй.** (10 сәғәт) | | | | |
| 31 | Көләмәс турахында төшөнсә.<br>Башҡорт телендә матбуғат. | 2 | 09.04<br>11.04 | |
| 32 | Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. | 2 | 16.04<br>18.04 | |
| 33 | Май –Еңеү көнө. | 2 | 23.04<br>25.04 | |
| 34 | **Контроль эш. Яҙ һулышы.** | 1 | 30.04 | |
| 35 | Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Йәй етте. | 3 | 02.05<br>07.05<br>14.05 | |
| | | 68 | | |

1- се ярты йыллыҡ

Контроль эш.

Декабрҙә.

Башҡортостанда ҡыш ноябрь айында уҡ башлана. Күлдәр, йылғалар, быуалар боҙ менән ҡаплана. Ағастар яланғаслана. Тик шыршы һәм ҡарағайҙар ғына йәшел булып ултыралар. Ер аҡ ҡарға күмелә. Ҡоштар һайрамайҙар. 22 декабрҙә иң ҡыҫҡа көн һәм иң оҙон төн була. Сатлама һыуыҡтар башлана. Ҡоштар һәм йәнлектәр йылдың ауыр миҙгелен кисерәләр.

Тәржемә: Башҡортостанда ҡыш ноябрь айында уҡ башлана. Күлдәр, йылғалар, быуалар боҙ менән ҡаплана.

**2- се ярты йыллыҡ**

Контроль эш

Яҙ һулышы.

Ҡояш көндән-көн нығыраҡ йылыта. Ҡарҙар ирей. Өй түбәләренән, аҙбар ҡыйыҡтарынан тамсылар тама. Тау биттәре асылды. Тәүге бәләкәй йырғанаҡтар күренде.

Тәбиғәт көндән-көн йәнләнә бара. Соҡорҙарҙан шаулап ҡар һыуҙары аға. Тау битләүҙәрендә үләндәр йәшәрә. Тәүге сәскәләр ҡалҡып сыҡты. Сыйырсыҡтар һәм һабан турғайҙары һайрай. Яҙ көнө бөтә нәмә яңынан йәшәй башлай.

**3. Календарно-тематическое планирование**
**Календарь-тематик план. Туған әҙәбиәт. 5 класс.**

| № | Тема | | Үткәрелеү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| | | | План | фактик |
| | **Көҙ етте.**( 5сәғәт) | | | |
| 1 | Көҙ тураһында шиғырҙар. | 1 | 06.09 | |
| 2 | Б.Бикбай.Туған тел. | 1 | 13.09 | |
| 3 | Р.Ғарипов. Торналар. | 1 | 20.09 | |
| 4 | М.Кәрим. Сыйырсыҡ балаһы. | 2 | 27.09<br>04.10 | |
| | **Минең ғәзиз Уралкайым.** ( 4 сәғәт) | | | |
| 5 | Башҡортостан тауҙары. | 1 | 18.10 | |
| 6 | Уралиә иле. Т.Ғәниева. | 1 | 25.10 | |
| 7 | Өфө-Башҡортостандың баш ҡалаһы. | 1 | 08.11 | |
| 8 | Өфө тураһында шиғырҙар. | 1 | 15.11 | |
| | **Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар.** ( 3сәғәт) | | | |
| 9 | А.Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар.Әкиәт. | 2 | 22.11<br>29.11 | |
| 10 | Тыуған көн. | 1 | 06.12 | |
| | | | | |
| | **Ҡыш.** ( 8сәғәт) | | | |
| 11 | С.Әлибаев. Ҡыш. | 2 | 13.12<br>20.12 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 12 | М.Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта. | 2 | 27.12<br>10.01 | |
| 13 | Д.Буләков. Яралы китап. | 2 | 17.01<br>24.01 | |
| 14 | В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. | 2 | 31.01<br>07.02 | |
| **Башҡорт халыҡ ижады.** (6 сәғәт) | | | | |
| 15 | Башкорт халык әкиәттәре. | 2 | 14.02<br>21.02 | |
| 16 | Г.Аллаяров. Таҫтамал. | 2 | 28.02<br>06.03 | |
| 17 | Башҡорт халыҡ йырҙары.<br>Көләмәстәр. | 1<br>1 | 13.03<br>20.03 | |
| **Яҙ.**( 6 сәғәт) | | | | |
| 18 | Башҡортостан йылғалары. | 2 | 03.04<br>17.04 | |
| 19 | С.Әлибаев тураһында. | 2 | 24.04<br>08.05 | |
| 20 | Яҙ байрамдары. | 1 | 15.05 | |
| 21 | Баҡсалағы яҙғы эштәр. | 1 | 22.05 | |
| **Йәй.** (2 сәғәт) | | | | |
| 22 | **Контроль эш.** | 1 | 23.05 | |
| 23 | Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Йәй етте. | 1 | 23.05 | |
| | | 34 | | |

## 1.«Туған тел» уҡыу предметын, курсын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

***Планируемые результаты освоения учебного предмета “Родной (башкирский) язык”***

**7 класта шәхсән, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре**

Етенсе класта **шәхсән һөҙөмтәләр** булып түбәндәгеләр тора:

- туған телде милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
- туған телдә алынған белем һәм күнекмәләрҙе мәктәптә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу;
- төрлө социаль ситуацияларҙа оло кешеләр һәм үҙ тиңдәштәрең менән хеҙмәттәшлек күнекмәләрен үҫтереү.
- Был һөҙөмтәләргә ирешеү сараһы булып китаптағы текстар тора.

**Метапредмет һөҙөмтәләр булып** универсаль эш төрҙәрен формалаштырыу тора.

- яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың һәм тиңдәштәреңдең әйтеүе, балалар тапшырыуҙары, аудиояҙмалар һәм мәғлүмәти технологияның башҡа формаларын) адекват ҡабул итеү;

- бирелгән тема буйынса диалог төҙөй белеү; һорауҙарға ҡыҫҡа һәм тулы яуап биреү, диалогты башлай һәм тамамлай белеү;
- предметтан предмет-ара аңлатмаларҙы үҙләштереү;
- мәктәптә һәм мәктәптән тыш ҡыҙыҡһыныуҙарынан сығып, туған телдә аралышыу.

*Регулятив УЭТ*:

- уҡытыусы ярҙамында дәрестә эш маҡсатын билдәләү;
- дәрестә эштең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү;
- үҙ фекереңде белдерә белеү;
- уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләргә өйрәнеү.

Регулятив УЭТ формалаштырыуҙың сараһы булып дөрөҫ уҡыу формалаштырыу һәм проблемалы диалогик уҡытыу технологиялары тора.

*Танып белеү УЭТ*:

- китап менән эшләй белеү (шартлы тамғаларҙы айырыу);
- текста, һүрәттәрҙә һорауҙарға яуап табыу;
- уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың берҙәм эшенә баһа биреү.
- мәғлүмәтте бер төрөнән икенсе төрөнә күсереү: бәләкәй текстарҙы ентекләп һөйләү.

*Коммуникатив УЭТ*:

- фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә белдереү (һөйләм һәм бәләкәй текст кимәлендә);
- башҡаларҙың телмәрен тыңлау һәм аңлау; тыңлау алымдарын ҡулланыу: теманы (башы), мөһим һүҙҙәрҙе билдәләү;
- уҡытыусы менән берлектә класташтар менән үҙеңде нисек тотоу һәм аралашыу ҡағиҙәләре тураһында һөйләшеү һәм уларҙы үтәү;

«Туған (башҡорт) тел» курсын өйрәнеүҙең п**редмет һөҙөмтәләре булып** түбәндәгеләр тора:

- Уҡыусыларҙа туған (башҡорт) телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- Башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп, үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү.
- Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
- Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
- Йәмғиәт тормошонда телдең роле; туған телдең әһәмиәте; фонетика, графика, лексиканың нигеҙҙәре менән танышыу
- Ижади диктанттар һәм иншалар яҙыу.

## 7 класс

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе.

Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

Шарт һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы.

Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе.

Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.

Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: *бирешмәҫкә тырыша, күрергә теләй һ.б.*

Уртаҡ ҡылымдан һуң *ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин* модаль һүҙҙәре килеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.

Хәл ҡылым, уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре.

Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.

Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы.

Теркәүестәр. Уларҙың һөйләм киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгө ҡулланышын күҙәтеү.

Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр.

Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Бәйләүестәр. Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Киҫәксәләр. Уларҙың айырым һүҙгә йәки һөйләмгә ниндәй булһа ла мәғәнә төҫмөрләнеше биреүсе ярҙамсы һүҙ булыуы тураһында төшенсә. Киҫәксәләрҙең төркөмсәләре, уларҙың дөрөҫ яҙылышы, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдә хәбәр булып килеүе, шулай уҡ һөйләмгә төрлө модаллек мәғәнәләрен биреүгә лә хеҙмәт итеүе, дөрөҫ яҙылышы.

Ымлыҡтар. Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы.

Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлауға, бәйләнешле телмәр үҫтереү -.

Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре араһындағы айырманы аңлата белеү. Һүҙҙәргә морфологик анализ күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эш. Йыл буйына өйрәнелгән морфологик күренештәрҙе текстан таба һәм аңлата белеү.

## 2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
## Содержание учебного предмета

**Фонетика һәм орфоэпия.** Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырыу. Ҡалын һәм нәҙек өндәрҙе айырыу, ҡалынлыҡ-нәҙеклек буйынса парлы һәм парһыҙ тартынҡы өндәрҙе билдәләү. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡы өндәрҙе айырыу, парлы һәм парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау өндәрҙе билдәләү. Өндөң сифат буйынса характеристикаһын билдәләү: һуҙынҡы – тартынҡы; ҡалын - нәҙек һуҙынҡы, парлы-парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡы. Һүҙҙәрҙәе ижектәргә бүлеү. Башҡорт әҙәби теле нормаларына ярашлы өндәрҙе һәм өндәр бәйләнешен дөрөҫ әйтеү. Һүҙҙе фонетик тикшереү.

**Графика.** Өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу. Яҙыуҙа ҡалынлыҡ-нәҙеклекте билдәләү. Тартынҡы өндәрҙе яҙыуҙа сингармонизм принцибына таяныу. Хәрефһеҙ график сараларҙы: араһында ҡалдырылған буш урын, юлдан юлға күсереү билдәһен, абзацты ҡулланыу. Алфавитты белеү: хәрефтәрҙе дөрөҫ атау, уларҙың тәртибен белеү. Алфавитты һүҙлектәр, белешмәләр, каталогтар менән эшләгәндә файҙаланыу.

**Лексика** (курстың бар бүлектәрендә лә өйрәнелә). Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Мәғәнәләрен аныҡларға кәрәкле һүҙҙәрҙе айырып алыу. Аңлатмалы һүҙлек ярҙамында текстағы һүҙҙе билдәләү һәм уның мәғәнәһен асыҡлау. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр менән таныштырыу.

**Һүҙ составы** (морфемика). Тамырҙаш һүҙҙәр төшөнсәһен үҙләштереү. Тамырҙаш һүҙҙәр менән бер үк һүҙҙең төрлө формалары араһындағы айырма. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе һәм синонимдарҙы, тамырҙаш һүҙҙәр һәм омонимик тамырлы һүҙҙәрҙе айырыу. Айырып алына торған бер үк төрлө морфемалы һүҙҙәрҙә ялғау, тамырҙар, нигеҙ билдәләү. Һүҙҙе составы буйынса тикшереү.

**Морфология.** Һүҙ төркөмдәре. Һүҙ төркөмдәрен үҙ паллы һәм ярҙамсы төрҙәргә бүлеү.

**Исем.** Телмәрҙәге роле, ҡулланылышы. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе таба белеү. Кем?, нимә? һорауҙарына яуап булып килгән исемдәрҙе айырыу, рус теле менән сағыштырыу. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үгәреше. Килеш һорауҙары буйынса айырыу. Исемдәргә морфологик анализ.

**Сифат.** Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Сифаттың һан һәм килеш менән үҙгәреше. Сифат дәрәжәләре. Сифатҡа морфологик анализ.

**Алмаш.** Алмаш тураһында дөйөм төшөнсә. Зат алмаштары, роле, ҡулланылышы. Берлектәге һәм күплектәге I, II, III зат алмаштары.

**Ҡылым.** Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Ҡылымдарҙың инфинитив (башланғыс) формаһы. Ҡылымдыңь заман менән үҙгәреше. Хәҙерге, үткән, киләсәк заман ҡылымдарының зат һәм һан менән үгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Ҡылым һөйкәлештәре. Ҡылымға морфологик анализ.

**Рәүеш.** Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш дәрәжәләре.

**Һан.** Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр. Һан төркөмсәләре.

**Ярҙамсы һүҙҙәр.** Уларҙың мәғәнәһе, һөйләмдәге роле.

**Синтаксис.** Һөйләмдең, һүҙбәйләнештең, һүҙҙең айырмаһы. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу.

Һөйләмдең баш киҫәктәрен: эйә һәм хәбәрҙе табыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айырыу.

